*Рәшит КӘЛИМУЛЛИН,*
*журналист*

# “УМЫРТҠА ҺӨЙӘГЕ” НЫҠ БУЛЫРҒА ТЕЙЕШ



Нефть сығарыу һәм эшкәртеү — Башҡортостан иҡтисадының «умыртҡа һөйәге» булып тороуы барыбыҙға ла мәғлүм. Дәүләт суверенитеты тураһында декларация иғлан иткәндә, әлбиттә, республиканың иҡтисади үҙаллылығы булырға тейешлеге лә күҙ алдында тотолдо һәм ул тап шул тармаҡтарға таянырға тейеш ине. Сөнки республика сәнәғәте алған табыштың өстән ике өлөшөн һәм экспортҡа ебәрелгән продукцияның 90 процентын яғыулыҡ-энергетика комплексы бирә. Республика етәкселегенең күҙаллауы дөрөҫ булды: Рәсәйҙе тәрән упҡынға төшөргән ауыр иҡтисади бөлгөнлөк заманында ла Башҡортостан фәҡәт яғыулыҡ-энергетика комплексы ярҙамында тотороҡло үҫешен һаҡлап ҡалды, социаль-иҡтисади күрһәткестәр буйынса Рәсәйҙең башҡа бөтә төбәктәренән тип әйтерлек өҫтөнөрәк булды. 90-сы йылдар башында, йәғни иҡтисади үҙаллылыҡ барлыҡҡа килеү менән, нефть сеймалы нигеҙендә эшләүсе тармаҡтар республикаға бик ҙур файҙа килтереп өлгөрҙө. Тап шул заманда медицина, еңел сәнәғәт, ауыл хужалығы өсөн күп импорт ҡорамалдар, алдынғы технологиялар һәм етештереү линиялары, кирбес заводтары, колбаса етештереү цехтары һатып алынды. Бөгөн дә республикабыҙ нефть эшкәртеү күләме буйынса Рәсәйҙә беренсе урынды тота. Бөтә ил етештергән бензиндың 15, дизель яғыулығы һәм мазуттың 16, машина майының 21 проценты беҙҙең республикаға тура килә. Башҡортостанда яғыулыҡ-энергетика комплексы 80 меңдән ашыу кешене эш менән тәьмин итә.

Ләкин хәҙерге ҡатмарлы заманда, тәбиғи, был комплекс бер үҙе генә «ожмах утрауы» булып ҡала алмай. Иҡтисадтағы кире күренештәр уны ла ситләп үтмәне. Улай ғына ла түгел — был кире күренештәр әҙ-әҙләп электән үк йыйылып килде һәм бөгөн тәрән үҙгәрештәр талап итә.

Рәсәйҙә нефть һәм газ сәнәғәтенең финанс-иҡтисади хәле ауыр булыуының сәбәптәре түбәндәгеләр: 1) сығымдар ҙур; 2) 1998-1999 йылдарҙа донъя баҙарында нефтькә хаҡ төштө; 3) эске баҙарҙа ҡулланыусыларҙың бурысы күп.

Беҙҙең республика өсөн был тармаҡты ауыр хәлгә ҡуйыусы тағы бер ҙур мәсьәлә — Башҡортостанда нефть запасының кәмегәндән-кәмей барыуы. Ҡасандыр йылына 40 миллион тонна ҡара алтын сығарған «Башнефть» акционерҙар компанияһы хәҙер углеводород сеймалы сығарыуҙы йылына 15-17 миллион тоннанан да арттыра алмай, ә тағы ла бер нисә йылдан был күрһәткес 10 миллион тонна тирәһе генә тәшкил итәсәк. Шул уҡ ваҡытта «Башнефтехим» компанияһына ҡараған нефть эшкәртеү заводтарының ғына ла был сеймалға мохтажлығы 30 миллион тоннанан ашып китә. Бынан тыш, ошо тармаҡтағы иң ҡеүәтле предприятиеларҙың береһе «Салауатнефтеоргсинтез» йәмғиәте бар. Күренеүенсә, табылған сеймал менән уға мохтажлыҡ араһындағы айырма йылдан-йыл арта. Һуңғы осорҙа донъя баҙарында нефткә хаҡ артыуын да иҫәпкә алһаҡ, был кәмеү беҙҙең республика файҙаһына түгел, әлбиттә. Был осраҡта республика хөкүмәтенә («Башнефть» компанияһы акцияларының 67,9 проценты дәүләт ҡулында) ике ҡатмарлы мәсьәлә менән шөғөлләнергә тура килә: эшкәртеү ҡеүәттәре өсөн углеводород сеймалы эҙләү һәм нефтселәр коллективын эш менән тәьмин итеү. Шулай ҙа үҙ эшмәкәрлеге осоронда, йәғни 1932 йылдан алып, 250 ятҡылыҡты эшкәрткән, 37 мең скважина быраулаған һәм 1,5 миллиард тонна нефть, 70 миллиард тонна тәбиғи газ сығарған нефтселәр коллективы һис бөтмәүсе, ки-

реһенсә, арта барыусы байлыҡҡа эйә: ул 70 йылға яҡын дәүерҙә ҙур тәжрибә тупланы, күп һандағы белгестәр тәрбиәләне. СССР, Һиндостан, Куба, Сүриә һәм башҡа илдәрҙә нефть сығарған йәки ярҙамлашҡан был коллективтың тәжрибәһе киң билдәле һәм шуға күрә лә уны Башҡортостандан ситкә лә йыш саҡыралар. Юҡҡа ғынамы ни, Көнбайыш Себерҙәге Кира-Коттын һәм Хазар ятҡылыҡтарын эшкәртеүгә тендер иғлан ителгәс, «Башнефть» ундағы байтаҡ коллективтар араһында еңеп сыҡты һәм был ятҡылыҡтарҙы эшкәртеү хоҡуғын алды. Беҙҙең нефтселәр ошондағы Белорусский ҡасабаһында үҙ базаһына нигеҙ һалды, хәҙер был ятҡылыҡтарҙан ҡара алтын ағымы көсәйгәндән-көсәйә. Бынан тыш, акционерҙар компанияһы Удмуртияла нефть сығарыу өсөн «БелКамнефть» идаралығын ойошторҙо.

Шулай итеп, Башҡортостан ерендә ҡара алтын запасы кәмей барыу менән бергә, «Башнефть» уны башҡа төбәктәрҙә сығарыуҙы арттыра. Ә был төбәктәрҙең үҙҙәрендә нефть сығарыу предприятиелары ойоштороу һәм уларҙың эшен заман талаптарына тиңләшерлек итеп күтәреү өсөн байтаҡ йылдар кәрәк. Тимәк, «Башнефть» тәжрибәһенә яҡын киләсәктә көслө конкуренция янамай. Тик заман нефть сығарыусылар алдына ла ҡаты талаптар ҡуя. Баҙар иҡтисадында батмай ҡалыу өсөн (ә бында инде тотош республиканың мәнфәғәте күҙәтелә) компания был талаптарҙы үтәргә мәжбүр: күп нәмәләргә сығымдар кәметелә, социаль-көнкүреш объекттары ҡалалар һәм ҡасабаларҙың муниципаль милкенә күсерелә, һаҡлап ҡалынған подразделениеларҙа ҡаты һаҡсыллыҡ режимы булдырыла, табыш алыуҙы арттырыу өсөн бөтә республика ҡалалары һәм райондарында компанияның үҙ АЗС-тары төҙөлә. Сит подряд ойошмаларынан эшләтеү ҡыйбатлана башлағас, нефтселәр күпселек төҙөү-ҡороу эштәрен үҙ көсө менән башҡарыуға күсте. Ни тиһәң дә, уларҙың элекке йылдарҙа уҡ һалынып ҡалған көслө етештереү базаһы бар бит. Эшләүселәр һанын ҡыҫҡартыу бәләһе лә урап үтмәне нефтселәрҙе. Әйткәндәй, Көнбайыш Себергә вахта бригадалары туплап ебәрергә кәрәк булғас, «Башнефть» ситтән кешеләр йыйманы, ә ошо «ҡыҫҡартылған» нефтселәрҙе ҡабат саҡырҙы.

Бөгөн компания бөтәһе 140 ятҡылыҡты эшкәртә. Әлбиттә, алдынғы технологиялар кем ҡулында һәм кем уларҙы тиҙерәк тә, отошлораҡ та файҙалана ала — киләсәк тә шуның яғында. Башҡортостан нефтселәренең фәнни-техник базаһы бик тос ҡына. Нефтсе-ғалимдар тырышлығы менән компания йыл һайын 20-25 сәнәғәт технологияһына һынау үткәрә, уңышлылары файҙаланыуға индерелә. Компания етәкселәре әйтеүенсә, әлеге көндә һәр технология 1 һум сығымға 10-12 һум отош бирергә һәләтле. Был технологияларҙы эшләүселәр алдына ҡуйылған төп маҡсат — ҡатламдарҙың нефть биреүсәнлеген арттырыу. Бөгөнгө мәғлүмәттәргә ҡарағанда, геологик запастарҙың 42 проценты ғына өҫкә һурҙырып алына, ҡалғаны ер аҫтында тороп ҡала. Әгәр ҙә ундағы нефтте ҡыуҙырып сығарыуҙы 1 процентҡа ғына арттырғанда ла был тотош бер Арлан ятҡылығы асыуға тиң булыр ине, ти белгестәр.

Сығарылған нефтте эшкәртеү ҙә анһат бирелмәй бөгөн. Бөгөн Ер шарында 700-ҙән ашыу нефть эшкәртеү заводы бар, уларҙың һәр береһе уртаса 5 миллион тоннанан ашыу нефть эшкәртә ала. Ә беҙҙең республиканың нефть эшкәртеү ҡеүәттәре, өҫтәрәк әйтелгәнсә, йыл һайын тиҫтәләрсә тонна углеводород сеймалы эшкәртергә һәләтле. Әле улар эшкәрткән күләмдең яртыһынан ашыуы ситтән, нигеҙҙә Көнбайыш Себерҙән ҡыуҙырып килтерелә.

Был заводтарҙың элек-электән килгән бурысы — нефть эшкәртеүҙе «тәрәнәйтеү», йәғни сей нефттән күберәк асыҡ төҫтәге продукттар (бензин, кәрәсин, дизель яғыулығы) алыу. Ошо бурыс уға партия заманында ла йыл һайын ҡуйыла килде, ләкин Европа илдәрендә күрһәткес 90 процентҡа еткән дәүерҙә беҙҙең Өфө заводтарында ул 1998 йылда ла әле 60 проценттан саҡ ашҡайны һәм артабан да уны һиҙелерлек күтәрә алманылар. Әлбиттә, бының өсөн ҡорамалдарҙы яңыртып торорға, ваҡыт уҙған һайын алдынғыраҡ технологияларға күсә барырға кәрәк. Ә был эш ҙур сығымдар талап итә. Етмәһә, иҡтисадтың экстенсив үсеше замынында, күләм артынан ҡыуып, быға әллә ни мөмкинлек тә бирмәнеләр, аҡса бүлеү-бүлмәү мәсьәләһе лә Мәскәү ҡулында ине.

Нефть эшкәртеү предприятиеларына ҡаҙнаны тулыландырып тороусы «һауын һыйыры» итеп ҡарау оҙаҡ йылдар дауам итте, ә уларҙың үҙҙәрен яңыртыуға иғтибар етмәне. Башҡортостан үҙаллылыҡ юлына баҫҡас ҡына ошо үҙаллылыҡтың нигеҙен тәшкил итеүсе нефть эшкәртеү һәм нефть химияһы тармаҡтарына иғтибар

бермә-бер артты. Һуңғы йылдарҙа ғына ла бында күп яңы объекттар төҙөлдө, күп ҡорамалдарға реконструкция үткәрелде. Улар араһында «Новоил» йәмғиәтендәге күҙәнәкле кокс етештереү ҡоролмаһын, май тултырыу линияһын, «Өфөоргсинтез» йәмғиәтендәге полипропилен етештереү ҡеүәтен һәм башҡаларҙы һанап китергә мөмкин, баҙарҙа үтемле булған яңы продукция төрҙәрен етештереү үҙләштерелә, ҡаҙнаға «тере» аҡса биреүсе автозаправкалау станциялары бик күп төҙөлә.

Ләкин Башҡортостандың нефть эшкәртеү һәм нефть химияһына идара итеүсе структураһы бөгөн баҙар талаптарына яуап бирерлек эшләй тип әйтеп булмай. Тышҡы һәм эске баҙарҙа тармаҡ өсөн уңайлы шарттар тыуыуға ҡарамаҫтан, 1993-1994 йылдарҙа уҡ беҙҙең был предприятиелар түләүгә һәләтлеген юғалтты. Бының сәбәбе асыҡ — иҡтисади үҙаллылыҡҡа эйә булып алғас, предприятиелар үтә ҡиммәтле һәм үҙҙәрен иҡтисади яҡтан һәр ваҡытта ла аҡламаған проекттарға бик күп сығымдар түкте. Яңыртыу һәм реконструкция үткәреү, төҙөлөш алып барыу финанс мөмкинлектәрен етерлек иҫәпкә алмайынса эшләнде, ә етештереү сығымдарын кәметеү буйынса етерлек сара күрелмәне. 1998 йылда 1 һум тауар продукцияһы сығарыу «Башнефтехим» заводтары буйынса уртаса 92,8 тин сығымдар талап итте. Күп кенә продукттары сифаты буйынса донъя талаптарына яуап бирерлек йәки хатта юғарыраҡ та булған бер мәлдә хаҡы буйынса улар үтә ҡыйбат һәм шул арҡала ғына конкуренцияға түҙмәй ине. Был заводтарҙың түләүгә һәләттәрен юғалтыуы республикабыҙ бюджетына ла ныҡ ҡына зыян килтерҙе.

Нефть эшкәртеү һәм нефть химияһы предприятиелары, улар менән бергә бөтә яғыулыҡ-энергетика комплексына идара итеүҙе тамырынан үҙгәртеү талап ителә ине. Уларҙы берләштереү идеяһы электән үк булды булыуын һәм был ошо заводтарҙың барлыҡҡа килеү тарихы менән дә аңлатыла ине. Билдәле булыуынса, иң тәүҙә эшләй башлаған Өфө нефть эшкәртеү заводы — яғыулыҡ, аҙағыраҡ төҙөлгән Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводы (хәҙерге «Новоил») — яғыулыҡ һәм машина майы, КПСС-тың XXII съезы исемендәге завод (хәҙерге «Өфөнефтехим») яғыулыҡ, машина майы һәм нефть химияһы продукцияһы етештереүгә махсуслашҡайны. Ләкин баҙар иҡтисадына күсеү башланғас та был заводтарҙың һәр береһенең үҙе теләгәнсә көн күреүе иҡтисади-финанс яғынан аҡланмай башланы.

1994 йылда «Башнефтехимзаводы» берекмәһе нигеҙендә ойошторолған «Башҡортостан нефтехимия компанияһы» йәмғиәте хәлде төҙәтеү өсөн ашығыс саралар күрҙе — сығымдарҙы кәметеүгә, идара итеүҙе уңайлыраҡ итеүгә йүнәлеш алынды, коммерция, тышҡы сауҙа, бухгалтерия, финанс, юридик хеҙмәттәр үҙәкләштерелде. Был финанс тәртибен, коммерция эшен, һалым түләүҙе яйға һалырға мөмкинлек бирҙе. Ләкин, тышҡы һәм эске баҙарҙағы шарттар ҡатыраҡ була башлау сәбәпле, был саралар ғына етерлек булмай сыҡты. Шуға күрә 1998 йылдың апрелендә акционерҙар матди, хеҙмәт, финанс ресурстарын бер коллективтыҡы һымаҡ итеп берләштерергә ҡарар итте — Башҡортостан яғыулыҡ компанияһы ойошторолдо. Уға нефть эшкәртеү заводтарынан тыш «Башнефть» компанияһы һәм «Башкирэнерго» йәмғиәттәре лә инде.

Был процесс — нефть эшкәртеүҙе концентрациялау — донъя иҡтисадына ла хас күренеш. Мәҫәлән, Көнбайыш Европала нефть эшкәртеү заводтары һаны һуңғы йылдарҙа 34 процентҡа, АҠШ-та 36 процентҡа кәмене. Кариб диңгеҙе бассейнындағы утрауҙарҙа урынлашҡан ваҡ нефть эшкәртеү заводтарының иһә күбеһе йә башҡа эре предприятиеларға ҡушылды, йә бөтөнләй ябылды.

Яғыулыҡ-энергетика комплексының иҡтисади-финанс мөмкинлектәрен һәм технологик сылбырын берләштереү үҙенең ыңғай һөҙөмтәләрен бирҙе. 2000 йылдың тоғыҙ айында заводтар 18,5 миллион тонна нефть эшкәртте, был 1999 йылдың шул уҡ осоро менән сағыштырғанда 17 процентҡа күберәк. Автомобиль бензины етештереү 22,3 процентҡа, дизель яғыулығы етештереү— 18, яғыулыҡ мазуты эшләп сығарыу 10,7 процентҡа артты.

Башҡортостандың яғыулыҡ-энергетика комплексы, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге шундай комплекстарҙан айырмалы рәүештә, тулы концентрацияға эйә: уға сеймал табыу ҙа, уны тулыһынса әҙер булғансы эшкәртеү ҙә, химия һәм нефть химияһы ла, фән дә, төрлө профилле һәм күп һандағы белгестәр ҙә инә. Был милли байлығыбыҙҙы һаҡлап ҡалырға, киләсәк йәшәйешебеҙ өсөн үҫтерергә кәрәк.